## *Себештәр һәм ҡарауылсы*

**Маҡсат:** балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; уйын етеҙлек, тәүәкәллек тәрбиәләй, иғтибарлы булырға өйрәтә; балаларҙың телмәрен үҫтерә.

**Уйын барышы:** уйнаусы балалар, һанашмаҡ әйтеп, ҡарауылсы һайлайҙар. Ергә һыҙыҡ һыҙалар йәки оҙон еп һалалар. Ҡарауылсы бер яғында, ә себештәр икенсе яғында торалар. Себеш булған балалар йырлай-йырлай ҡарауылсы торған яҡҡа инә башлайҙар.

*Беҙ мамыҡтай себештәр,*
*Баҡсаға йүгерәйек.*
*Йәшел үлән сәскәләргә*
*Тиҙерәк күмеләйек.*

Себештәрҙең барыһы ла икенсе яҡҡа сығып бөткәс, ҡарауылсы уларҙы ҡыуырға тотона.

*Көш-көш, китегеҙ тиҙерәк,*
*Өҙмәгеҙ гөлдәрҙе.*
*Көш-көш, сығығыҙ баҡсанан,*
*Сүпләмәгеҙ емдәрҙе.*

Себештәр ҡарауылсынан ҡасалар. Кем тотола, шул ҡарауылсы булып ҡала. Уйын яңынан башлана.

**Ҡағиҙәһе:** себештәр икенсе яҡҡа сыҡҡанда, ҡарауылсы ситтә тора һәм үҙенең һүҙҙәрен әйтеп бөткәс кенә иптәштәрен баҫтыра. Себештәр үҙ яҡтарына ҡасып ҡотола.



## *Энә менән еп*

**Маҡсат:** балаларҙы тәрбиәсенең сигналы буйынса бер-береһенә бәрелешмәй бөтә майҙансыҡ буйлап тигеҙ хәрәкәт итергә өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү. Уйын етеҙлек, ҡырҡыу хәрәкәттәр яһарға, иғтибарлы булырға өйрәтә, тәүәкәллек тәрбиәләй.

**Ҡағиҙәһе:** " еп" " энә" артынан ғына йөрөргә тейеш. Әгәр ул яңылышһа, икенсе бала "еп "була, шунда уҡ "энә"не ҡыуа башлай. "Энә" менән "еп" бер-береһе менән тоташһалар, икенсе балалар "еп", "энә" булалар һәм уйын яңынан башлана.

**Уйын барышы**: балалар ҡулға-ҡул тотоношоп, ҙур түңәрәк яһай. Бер бала "энә", икенсеһе "еп" була. Тәрбиәсе сигнал биреү менән "энә" түңәрәк яһап торған балалар араһына ҡаса, ә "еп" уның артынан төшә. "Энә" нисек булһа ла "ептән" эҙ яҙлыҡтырырға тырыша. Әгәр "еп" " энәне" яңылышмай килеп тотһа, "еп" булған бала "энә" булып ҡаса.



## ***Без күңелле балалар***

**Уйын барышы**: балалар, һанашмаҡ әйтеп, көтөүсе һайлай. Майҙансыҡтың бер яғында- уйнаусылар, майҙансыҡтың ситендә-көтөүсе. Балалар күмәкләп йыр башлай.

*Без-күңелле балалар,*
*Уйнарға яратабыҙ,*
*Кем беҙҙе кыуып тота-*
*Иң етеҙ бала була.*

Һуңғы һүҙҙе әйтеү менән, балалар майҙансыҡтың икенсе яғына йүгерә, ә уртала торған көтөүсе уларҙы баҫтырып тоторға тырыша. Тотолған балалар көтөүсе ярҙамсыһына әйләнә. Икенсе тапҡыр йырлап йүгергәндә, улар көтөүсегә башҡа балаларҙы тотошорға ярҙамлашалар. Бөтә балалар ҙа тотолоп бөткәс, уйын яңынан башлана.



## *Ҡатырғыс*

**Уйын барышы**:  4-8 бала йыйылып, һанашмаҡ әйтеп,  көтөүсе һайлай.  Уйын башланыу  менән үк,  балалар көтөүсенән ҡасалар. Көтөүсе кемде ҡыуып тота, шул урынында ҡатып ҡала. Иптәштәре уға ҡулы менән тейһә, ҡатҡан бала ҡасып китә. Көтөүсе башҡаларҙы ҡатҡан балалар янына ебәрмәҫкә тырыша, шул уҡ ваҡытта бүтәндәрҙе лә тотоуын дауам итә.

**Ҡағиҙәһе:**  ҡатып торған балалар бер-береһен ҡотҡара алмай. Көтөүсе балаларҙың барыһын да тота алмаһа, уны икенсе бала алмаштыра.

**Әһәмиәте**:  уйын иғтибарлы булырға өйрәтә, етеҙлек, уяулыҡ, тәүәкәллек тәрбиәләй.



## *Баҫтырыш*

**Уйын барышы**: ҡыҙҙар менән малайҙар ишләп түңәрәккә баҫа: ҡыҙҙар алда, малайҙар артта тора. Уйын башында балаларҙың береһе түңәрәк уртаһына сығып, һанашмаҡтың һәр бер һүҙен парлашып торған балалар һанына тура килтереп, һанашмаҡ әйтә. Кемгә аҙаҡҡы һүҙ эләгә, шулар уйынды башлап ебәрә: иштең береһе түңәрк буйлап тышҡы яҡтан ҡаса, икенсеһе баҫтыра. Баҫтырыусы ҡасыусыны ҡыуып етеп,уға һуға ла, үҙе кире ҡаса. Баҫтырыусы инде ҡыуып еттем тигәндә, ҡасыусы түңәрәктә торған бер парҙың алдына барып баҫа. Парҙың артында торған бала, шунда уҡ баҫтырыусынан ҡасып, түңәрәк буйлап йүгереп китә. Әгәр ул тотолмаһа, икенсе парҙың алдына барып баҫа. Тотолһа, үҙен тотҡан баланы баҫтыра. Уйын шул тәртиптә дауам итә.

**Ҡағиҙәһе:** бер үк балаларға ғына баҫтырырға ярамай. Түңәрәк тышынан йүгергәндә, алыҫ китергә ярамай.

**Әһәмиәте**: уйын балаларҙың физик яҡтан үҫешенә ыңғай тәьсир итә. Иғтибарлылыҡ, етеҙлек, сослоҡ һыҙаттары тәрбиәләй.



# *Аҡ тирәк күк тирәк*

**Уйын барышы**: балалар ике төркөмгә бүленә, 10 метр самаһында аралыҡ ҡалдырып, ҡара- ҡаршы теҙелеп баҫалар. Тәүҙә бер төркөм һамаҡлай:

Ҡабырғалы ҡамсылыҡ,

Тама торған тамсылыҡ.

Аҡ тирәк, күк тирәк,

Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

Икенсе төркөмдәгеләр һамаҡлаған балаларҙың берәйһенең исемен әйтә. Мәҫәлән: «Марат батыр кәрәк!» Марат тигән бала, ҡаршы яҡҡа йүгереп барып, берәй араны өҙөргә тейеш. Әгәр өҙә алһа, бер баланы үҙ яғына алып сыға, ә өҙә алмаһа шул яҡта ҡала. Ҡайһы төркөмдә балалар күп – шулар еңеүсе.

**Әһәмиәте**: уйын балаларҙың тән мускулдарын төрлө хәрәкәтсел эшкә йәлеп итә, иғтибарлылыҡ, дуҫлыҡ сифаттары тәрбиәләй.



## *Еҙ бүкән*

**Уйын барышы**: балалар, парлашып, бер-бер артлы тора, берәү ишһеҙ булырға тейеш. Алда торған балалар сугеп, еҙ бүкән булып ултыралар. Арттағылар баҫып торалар. Ишһеҙ бала бер пар янына килә һәм артта торған баланан һорай:

*-Еҙ бүкәнде һатыуҙанмы?*

*-Еҙ бүкәнде һатыуҙан.*

*-Хаҡын күпме биреүҙән?*

*-Хаҡ ярым хаҡ, бот ярым бот.*

-Әйҙә йүгерешәйек, кем килеп алыр икән? – тип әйтешәләр ҙә түңәрәк тышынан ҡара-ҡаршы йүгерешәләр. Кем беренсе – шуға еҙ бүкән эләгә. Ишһеҙ бала шул уҡ һүҙҙәр менән үҙенә еҙ бүкән эҙләй.

**Ҡағиҙәһе:** түңәрәк эсенән үтергә, түңәрәктән ситкә китергә ярамай. Еҙ бүкән булған балалар урындары менән алышып торалар.

**Әһәмиәте**: уйын етеҙлекте һәм йылдамлыҡты үҫтерә.



## *Буяу һатыу*

**Уйын барышы**: һанашмаҡ әйтеп, « һатыусы » һәм кәтәүсе һайлайҙар. Кәтәүсе балалар янына килә лә:

*Буяуҙары бар микән,*
*Зәңгәр микән, ал микән?*
*Төҫөм матур, мине ал,*
*Тиеүсеһе бар микән?*

Шунан тауыш бирә:

*Тук, тук, тук!*

**Һатыусы:** -*Кем унда?*
**Кәтәүсе:** -*Хужалар өйҙәме?*
**Һатыусы:** -*Ин,ин!*
**Кәтәүсе:** -*Буяу һатаһығыҙмы?*
**Һатыусы**: -*Һатам,ниндәй кәрәк?*
**Кәтәүсе:** -*Ҡыҙыл!*

Кемгә алдан ҡыҙыл төҙ ҡушылған, урынынан тороп йүгерә. Кәтәүсе уны баҫтыра. Ҡасҡан бала тотолһа, кәтәүсе янында ҡала, тотолмай үҙ урынына килһә, уға икенсе буяу төҫө ҡушыла. Уйын буяуҙар һатылып бөткәнсе дауам итә.

**Ҡағиҙәһе:** буяу төҫтәре алдан ҡушыла, уны кәтәүсе ишетмәҫкә тейеш.

**Әһәмиәте**: уйын иғтибарлы булырға өйрәтә, етеҙлек, уяулыҡ, йылдамлыҡ тәрбиәләй.



## *Хәйләкәр төлкө*

**Уйын барышы:** балалар ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәккә баҫа. Күҙҙәре йомоҡ. Тәрбиәсе түңәрәк буйлап йөрөй һәм ҡулы менән берәй балаға тейә. Балалар тәрбиәсе сигналы менән күҙҙәрен асалар һәм ипләп кенә һорайҙар: *“ Хәйләкәр төлкө, һин кайҙа “*

Кемгә тәрбиәсе тейгән ул бер хәрәкәте менән дә үҙенең хәйләкәр төлкө икән күрһәтмәй. Балалар тағы ла ҡысҡырып һорайҙар. Өсөнсө тапҡыр ҡысҡырғанда, хәйләкәр төлкө ырғып уртаға сыға һәм: « Мин бында! » - тип ҡысҡыра. Балалар төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасалар. Төлкө уларҙы тоторға тырыша.

**Ҡағиҙәһе:** кемдәр тотола, уйындан сыға баралар.

**Әһәмиәте**: уйын иғтибарлы булырға өйрәтә, етеҙлек, уяулыҡ, үҙ-үҙеңде тота белеүҙе, ихтияр көсө тәрбиәләй.

